# Административ комиссия хәбәр итә

**Әтек ауылында йорт хайуандарын (эттәр) тотоу ҡагиҙәләрен үтәлеү торошон тикшереү буйынса планлаштырылған профилактик сара үтте. Күп эт хужаларының был ҡагиҙәләрҙе боҙоуы асыҡланды. Ул граждандар райондың административ комиссияһы тарафынан яуаплылыҡҡа тарттырыласаҡ. Башҡортостан Республикаһының административ кодексының 13.7 статьяһының 1-се бүлегенә ярашлы граждандарға эттәре дөйөм файҙаланыу урындарында ҡарауһыҙ йөрөгәндәре өсөн 2 мең һумға тиклем штраф ҡаралған. Ошоға тиклем бындай сара Ҡотан ауылында үткәйне. Һөҙөмтәһе буйынса 4 гражданға 7500 һум күләмендә штраф һалынды. Был эш башҡа ауыл биләмәләрендә лә дауам итәсәк.**




